*Закир ЗИННӘТУЛЛИН*

# БУШЛЫҠТЫ КЕМ ТУЛТЫРА?

*(Көнбайыш башкорттарының региональ субкультураһын тергеҙеү мәсьәләләренә кағылып)*

Һуңғы айҙарҙа нигеҙҙә башҡорт телле республика баҫмаларында йыш күтәрелгән көнбайыш башҡорттары мәсьәләһе, авторҙар бик дөрөҫ күрһәтеүенсә, уҙған быуат аҙағында һуңғы сиккә — милли идентитет кимәленә барып етте. Һис шикһеҙ, был процесс артабан иң тәүҙә информация һәм мәҙәниәт киңлегендә барасаҡ. Быға тиклем ошо темаға ҡағылған авторҙар (Н. Мәҡсүтова, Р. Янғужин, М. Мырҙабулатов, Ә. Әсфәндиәров һ.б) нигеҙҙә тарихҡа ғына мөрәжәғәт итеп, мәсьәләнең хәҙерге заманда мөһимерәк булған мәҙәни яғын икенсе планға ҡуйып килде. Ул нигеҙҙә уңышлы милли сәйәсәт ҡороу мөмкинлеге бик шикле. Көнбайышта йәшәгән милләттәштәребеҙгә ошо ҡатмарлы шарттарҙа нимә тәҡдим ителә һуң? Матбуғат XVIII-XX быуаттарҙағы мәғлүмәттәргә таянып, көнбайыш башҡорттарының иҫенә уларҙың кем икәнлеген төшөрһә, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре ҡурай байрамдары, оҙон көй конкурстары ойоштороуҙа ҙур тырышлыҡ күрһәтә. Ҡурай, оҙон көй — башҡорт милли мәҙәниәтенең бөгөнгө көндәге ысын «визит карточкаһы», әммә был осраҡта урындағы мәҙәни компонент иҫәпкә алынмауы һағайта төшә. Сөн һәм Базы буйында ниндәй урындағы компонент, региональ субкультура булһын — уларҙа бер нәмә лә юҡ, тип фекерләй күптәр. Йәнәһе, үҙҙәренеке һаҡланмаған, башҡаларҙыҡын алһындар. Иң еңел юл бәлки шулдыр, әммә иң дөрөҫө ошо юлмы икән? Сөн буйы башҡорттары араһынан берәй заман оло ҡурайсы, Базы буйы ауылдарынан оҙон көй оҫталары ла сығыр мөғайын, ләкин ул, мәсьәләгә киңерәк ҡарап, тәрәнерәк төшөп байҡаһаң, бик ҙур хата булыр ине. Был хата — Башҡортостан территорияһында тиҫтәләрсә йылдар дауамында хөкөм һөргән формаль һәм унитар рәсми мәҙәни сәйәсәт һөҙөмтәһе. Ул сәйәсәт республикабыҙҙың күпселек территорияһын мәҙәни йәһәттән ысын сүллеккә әйләндерҙе: бөгөн килеп, әйтерһең, ул төбәктәрҙәге аҫаба халыҡтың үҙ моңо, көйө, музыка ҡоралдары, йырҙары, бейеүҙәре, милли кейеме ғүмерҙә лә булмаған. Урындағы компонентҡа, региональ субкультураға нигеҙләнгән милли мәҙәниәт үҫешмәгәс, был хәл төбәк халҡының милли идентитетына ла кире йоғонто яһай. «Әллә беҙ башҡорт түгелме бөтөнләй?» — тип ғәжәпләнә күптәр. Беҙҙә башҡорт мәҙәниәте тураһында бик тар стереотип нығынған һәм ул көнсығыш башҡорттары мәҙәниәте, йыр һәм бейеү сәнғәте менән сикләнә. Оҙаҡ йылдар ошо стереотипҡа нигеҙләнгән мәҙәни сәйәсәт республиканың күпселек территорияһын үҙ контроле аҫтында тота алмай, һөҙөмтәлә барлыҡҡа килгән ифрат ҙур мәҙәни вакуум теләһә ниндәй суррогатты үҙ эсенә

туҙан һурғыс һымаҡ тултыра ла тултыра. Ошо феномен ентекләп тикшереүҙе талап итә, сөнки ул хәҙер һәләкәтле масштабтарға етеп бара. Быны ҡайһы берәүҙәр анһат «аңлата»: йәнәһе, күрше республика төбәктә шундай көслө мәҙәни экспансия сәйәсәте үткәрә. Әлбиттә, ул фактор ҙа бар, әммә иң мөһиме — бәләнең башын күршеләрҙә түгел, ә үҙебеҙҙә күрһәк кенә был ифрат ауыр, ҡатмарлы мәсьәләнең сиселешен табасаҡбыҙ. Табырға теләһәк, әлбиттә...

* * *

Үткән XX быуат башҡорт халҡының милли үҙаңы үҫеше йәһәтенән ысын мәғәнәһендә революцион күтәрелеш осоро булды — милләт, сикләнгән федератив рамкаларҙа булһа ла, үҙ дәүләтселеген ҡороуға дәғүә белдерҙе. Милли мәҙәниәттең артабанғы йылдам үҫеш өсөн ифрат ҙур этәргес көс алыуын инҡар итеү мөмкин түгел. Совет осорон тотош «ҡара бушлыҡ» тип күрһәтеү сәйәси реакционерҙар өсөн генә уңайлы, сөнки нәҡ шул йылдарҙа, сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт эсендә, башҡорт мәҙәниәте опера, балет, профессиональ бейеү, кинематография сәнғәте менән байыҡтырылды. Европа милләттәре мәҙәниәттең ҡайһы бер йүнәлештәрендә ике-өс быуат дауамында үткәнде башҡорт ижади интеллигенцияһы бер нисә тиҫтә йылда үҙләштерә алды. Айырыуса опера, балет сәнғәте өлкәһендәге ҡаҙаныштарыбыҙ һоҡланғыс — был йүнәлештәрҙә Башҡортостан иң юғары донъя стандарттары кимәленә яҡынлашты. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошо ике өлкәләге ҡаҙаныштар күберәк айырым шәхестәр менән генә бәйле булып, сәнғәтебеҙҙең дөйөм мөхите ул шәхестәр, уларҙың ижады өсөн «үҙ йорт» була алманы. Рудольф Нуриев, Нинель Юлтыева кеүек күренекле шәхестәрҙең трагик ижади яҙмышы ла шуны раҫлай. Ниндәй төп фактор ижади үҫеште тотҡарлап торҙо һуң?

Мәҙәниәттәге унификация, юғарынан төшөрөлгән директивалар нигеҙендә генә эш итеү халыҡты социаль-мәҙәни, тарихи нигеҙҙәренән айырыуға килтергәне аңлашыла. Нигеҙҙәргә килгәндә, улар, башлыса, патриархаль, традицион булараҡ, ғәмәлдә ауыл, крәҫтиән культураһы булып ҡына ҡалды. Быны ла инҡар итергә ярамай, сөнки беҙ әлегәсә шул тамырҙарҙан, сығанаҡтарҙан туҡланып йәшәп киләбеҙ. Ҡалаларҙа ныҡ башлаған заманса демократик милли мәҙәниәт башҡорт халҡында 30-сы йылдарҙа ғына үҫешә башлап, ул процесс әле лә тамамланмаған.

30-сы йылдарҙа коммунистик етәкселек, идеологик талаптарҙан сығып, самаһыҙ унификацияланған геомәҙәни киңлек ҡороу эшенә керешә. Башҡортостандың мәҙәни үҫеше лә, әлбиттә, ошо дөйөм процесҡа буйһондорола. Иң тәүҙә ниндәйҙер унификацияланған модель талап ителә. Башҡортостандың төрлө төбәктәренең традицион субкультуралары менән иҫәпләшеп тороу бөтөнләй булмай, уларҙың үҙенсәлекле музыкаль культураһы, йырҙары, бейеүҙәре, музыка ҡоралдары, милли кейеме онотола. Көнбайыш һәм Үҙәк Башҡортостанда үҙенсәлекле мәҙәниәт булыуы береһен дә ҡыҙыҡһындырмай. Бөгөн килеп ҡайһы бер сиктәш төбәктәрҙә күрше милләт йоғонтоһо көслө икән, был процестың урындағы тарихи, традицион субкультура менән бер ниндәй уртаҡлығы юҡ. Мәҫәлән, элек Үҙәк Башҡортостан халҡының кейҙәре, бейеүҙәре, милли кейеме, музыка ҡоралдары ниндәй булған? Күрше халыҡтыҡын ҡулланып йәшәмәгәндәрҙер бит. Үҙҙәренекен нисек тергеҙергә мөмкин?

Үҙәк һәм Көнбайыш Башҡортостан халҡының шаҡтай өлөшө, фин-уғыр сығышлы булараҡ, хәҙер инде башҡорт этносының айырып алғыһыҙ элементына әйләнеп киткәс, уларҙы бөтөн барлыҡ үҙенсәлектәре, шул иҫәптән музыкаль

культуралары менән бергә ҡабул итергә кәрәктер. Мәҫәлән, ул музыкаль культуранан инструменттарҙың исемдәре генә ҡалһа ла, тергеҙеү һәм ҡәҙерләп үҫтереү талап итеlә. Бөгөн Башҡортостан баш ҡалаһында өҫтөнлөк иткән, әммә хатта Өфөнөң тирә-яғындағы башҡорттарҙың да мәҙәни үҙенсәлектәре менән иҫәпләшмәгән, уны үҙ эсенә алмаған, үҫтереүҙе кәрәк тип һанамаған унификациялы милли мәҙәниәт, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, башҡорт халҡының ҙур өлөшөнән ситләшкән хәлдә ҡала. Ул тар, милләттең артабанғы үҫешенә, берләшеүенә ҡамасаулаған стереотип, фекерләү рәүеше хәҙер унификация өсөн нигеҙ итеп алынған Көнсығыш башҡорттарының мәҙәниәтенә лә файҙаға түгел. Дөрөҫөрәге, ул мәҙәниәттең үҙен бик уңайһыҙ хәлгә ҡуя. Өфөлә, ғәмәлдә, Үҙәк Башҡортостанда оҙаҡ йылдар йәшәгән мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, милли интеллигенция вәкилдәре менән ошо төбәк тураһында һөйләшә башлаһаң, «ә бында башҡорттар йәшәйме ни?» тигән «һорауҙы» бик йыш ишетергә тура килә. Күптәр өсөн мәҙәни Башҡортостан көньяҡ-көнсығыш менән генә сикләнә. Ни хәл итәһең, сәнғәтебеҙ әлегә күберәк шул төбәк иҫәбенә йәшәп килә. Ләкин тарихи үҫештә инвариантлылыҡ төшөнсәһе лә бар, һәм ул мәҙәни үҫешкә лә ҡағыла. Ике-өс тиҫтә йылдан башҡорт музыкаль культураһы, эстрада ниндәй йүнәлештәргә өҫтөнлөк бирәсәген күҙаллауы ауыр. Кем белә, бәлки, беҙ бөгөн танырға ла теләмәгән ятыған, буҙ, шөгөр ярты быуаттан Өфө сәхнәһендәге иң затлы музыка ҡоралына әйләнер. Сөнки көй-моң бит ул быуаттар буйына ҡанға һеңеп, генетик кимәлдә нығынған, төпкөл-тамырҙарҙан килгән нәмә.

Төбәктәрҙәге бөгөнгө милли-мәҙәни вакуумды уларҙың үҙҙәренең традицион субкультураларын тергеҙеп кенә тултыра аласаҡбыҙ. Әлегә иһә был проблемаға мөнәсәбәт ниндәй? Әйтәйек, онотолған, телебеҙҙә исемдәре генә һаҡланған музыка ҡоралдарына иғтибар бармы? «Асылыкүл, Түбәнге Дим башҡорттары ҡасандыр ҡыуыҡ өргән икән, үҙҙәренә кәрәк булһа — тергеҙһендәр...» — тигән, республикалағы фольклор үҫеше өсөн яуаплы бер эшмәкәрҙең ҡарашы, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бөгөн күптәргә хас. Мәҙәниәт өлкәһендәге компетентһыҙлыҡ сәйәсәттәге йәки иҡтисадтағы шундай уҡ уйланылмаған аҙымдарҙан да ауырыраҡ эҙемтәләргә килтереүе ихтимал. Бында һүҙ милли үҙаң, идентитет, генетик кимәлдәге тарихи хәтер тураһында бара. Беҙ әлегә ҙур милләтебеҙҙең дөйөм, күп субкультураларҙан хасил булған берҙәм полифоник системаһын үҫтереү мөмкинлегенән мәхрүм ителгәнбеҙ.

Урындағы традицион милли субкультура элементтары (музыкаль культура — уның иң мөһим өлөшө), шулай итеп, дөйөм милли ҡиммәттәрҙең тулы, тиң хоҡуҡлы өлөшө булып тора. Шул өлөштәрҙең юҡҡа сығыуы, дөйөм алғанда, милләтебеҙҙең бер өлөшөн мәҙәниәтһеҙлеккә дусар итеп, ғәмәлдә, уртаҡ милли ҡиммәттәрҙән, дөйөм милли үҙаң, идентитет формалашыу процестарынан да айыра. Юҡ ителгән урындағы субкультураны икенсе төбәктеке алмаштыра алмай.

Совет осоронда мәҙәни сәйәсәт рәсми идеология өсөн терәк сифатында ғына кәрәк булды, уның менән теләһә кем һәм нисек теләй — шулай етәкселек итә ала тип иҫәпләнде. Маҡсат итеп халыҡтың дөйөм мәҙәни кимәлен күтәреү ҡуйылманы. Һөҙөмтәлә милләттәштәребеҙҙең ҙур өлөшө үҙ төбәгенең субкультураһынан айырылған маргиналдарға әйләндерелде. Республика баш ҡалаһында бер ни тиклем үҫеш алған һәм самаһыҙ унификацияланған «рәсми милли сәнғәт», нигеҙҙә, көнсығыш райондарҙың төбәк субкультураһына таянды, кадрҙар потенциалын да күберәк шул яҡ

йәштәре иҫәбенә тулыландырып килде. Был унификацияланған мәҙәниәттең үҫешен контролдә тотоу, уны идеология маҡсатында ҡулланыу өсөн уңайлы модель ине.

Совет мәҙәни моделе 90-сы йылдарҙа Рәсәйҙең үҙендә, айырыуса Мәскәүҙә тиҙ арала тарҡалып, мәҙәниәткә лә үтеп ингән баҙар мөнәсәбәттәре менән алмаштырылды. Етмәһә, Рәсәйҙә урбанистик мәҙәниәт йылдам үҫешә башланы. Башҡортостан был йәһәттән күпкә артта ҡалды. Хатта ижади йәштәребеҙ ҙә элекке стереотиптарҙан тиҙ генә арына алманы: мәҫәлән, улар төҙөгән эстрада төркөмдәре лә урбанистик масс-культура талаптарына яҡынлаша алманы. Ә баҙар мөнәсәбәттәренә күсеү өсөн нәҡ шундай урбанистик масс-культура кәрәк. Күрше Татарстанда ла ундай масс-культура һуңғы йылдарҙа ныҡ ҡына үҫеште һәм шундуҡ Башҡортостан территорияһына көслө йоғонто яһай башланы. Шул уҡ хәл музыкаль продукция баҙарында ла ҡабатлана. Ситуация курьез төҫ ала. Бынан бер нисә йыл элек Октябрьский ҡалаһында ҡоролтай уҙғарылып, аҙаҡ концерт ҡуйыла. Һуңынан сәхнәгә урындағы йәмәғәтселек вәкилдәре сығып, рәхмәт һүҙҙәре әйтә. Социалистик Хеҙмәт Геройы миҙалы таҡҡан бер апай: «Беҙҙең ҡалаға Башҡортостандан артистар йышыраҡ килеп йөрөһөн ине», — тип, бер һөйләм менән бөтә эште боҙа ла ҡуя. Хеҙмәт ветераны яңылышып әйтмәй — төбәк бит мәҙәни йәһәттән инде күптән «ҡулдан ысҡынған». Ә хәлде төҙәтеү өсөн әлеге шул онотолған урындағы мәҙәни компонентты тергеҙеү мотлаҡ, Көнсығыш башҡорттары субкультураһын тәҡдим итеүҙең файҙаһынан күберәк зыяны — быны инде күптән аңларға ваҡыттыр. Үҙәк һәм Көнбайыш башҡорттарының ижади, милли-мәҙәни потенциалын файҙалана алмау милләтебеҙҙе ныҡ ҡаҡшата. Бабич, Аҡмулла кеүек шәхестәрҙе үҫтерә алған мөхит ҡоротола, башҡорт милләтенең әүәлдән алдынғы, юғары мәҙәниәтле өлөшө хәлһеҙләндерелә, тарҡатыла. Хәҙер беҙгә Бабич яҡташтарына: «Һеҙҙең ата-бабаларығыҙ үҙен башҡорт тип иҫәпләгән!» — тип мөрәжәғәт итергә генә ҡала. Аяныс хәл.

Өфөләге башҡорт милли ижади мөхите, тотош республиканың мәҙәни, әҙәби элитаһы позицияларына дәғүә итһә лә, ғәмәлдә, барыбер шул бер үк көнсығыш төбәк субкультураһы рамкалары, провинциализм менән генә сикләнеп, тотош милләтте консолидациялаусы заманса милли интеллигенция ҡатламы сифатында формалаша алмай. Тәүратта «Иң тәүҙә Һүҙ булды» тиелгән һымаҡ, ижади мөхиттә лә бөтә нәмә иң тәүҙә әҙиптең ҡәләм осонан сыға: йыр тексы ла, опера һәм балет та, фильм менән спектакль дә. Әҙәби мөхит күҙгә күренеп ҡартая, йәштәр араһында яҡын киләсәктә әҙәбиәтебеҙҙең төп көсө булырҙай ныҡлы ҡатлам төҫмөрләнмәүе хәүефкә һала. Шуның менән традициялар күсәгилешлеге лә өҙөлә: мәҫәлән, романистикала, трагедия жанрында. Эре жанрҙар һәр милли әҙәбиәттең ныҡлы нигеҙен тәшкил итеп, балет, опера, драматургия үҫешен дә тәьмин итһә, беҙҙә әлегә унда бушлыҡ. «Йәштәр» тигәндәребеҙ ижадҡа һуңлап килә, бының төп сәбәбе — матди хәлдәрендә. Был да Өфө, баш ҡала проблемаһы бит.

Ижади интеллигениянан бөгөнгө көндә күпкә киңерәк ҡараш, юғарыраҡ категориялар менән фекерләү талап ителә, сөнки хәҙерге мәлдә элекке совет мәҙәни моделенә алмашҡа нимә лә булһа тәҡдим итергә күптән ваҡыт. Был эш милли интеллигенциянан ифрат ҙур интеллектуаль көсөргәнешлек талап итәсәк, сөнки күп нәмәне буш урындан башларға кәрәк буласаҡ.

Бөгөнгө демократик процестар, милли суверенитет идеялары, һуңғы йылдар тәжрибәһе күрһәте-

үенсә, бик ҙур дәрәжәлә информацион-мәҙәни мөхит менән бәйле. Элекке башҡорт ихтилалдары заманында көрәш ер һәм дин өсөн булһа, хәҙер ул информация мөхите, кеше аңы өсөн бара. Беренсе планға милли тел, киң информация саралары, мәҙәниәт, нәшриәт мәсьәләләре сыға, сөнки беҙ информация технологиялары дәүеренә аяҡ баҫтыҡ. Замандаштарыбыҙҙың милли үҙаңы, менталитеты, идентитеты формалашыу процесына ла иң ҙур йоғонтоно информация мөхите яһай. Башҡорт халҡы үҙ иленең барлыҡ төбәктәрендәге информацион-мәҙәни мөхиткә үҙе хужа булыуға ынтылырға тейеш, әммә әлегә күп төбәктәрҙә процестар үҙ ағышына ебәрелгән һәм, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, күрше республика йоғонтоһона эләккән. Халыҡтың тарихи хәтеренә, генетик кимәлдә ныҡыған ҡиммәттәргә таянып ҡына эш итеү бөгөн аҙ. Әммә ул өлкәлә лә бик нескә эш талап ителә. Төбәктәр үҙҙәре генә был эште башҡарырлыҡ түгел. Яҡшы һаҡланған, бөгөнгө көндә көслө тип иҫәпләнгән көнсығыш субкультураһы ла Өфө ярҙамынан тыш үҫешә алмаясаҡ — уға ла әленән-әле яңыраҡ, заманса һулыш кәрәк булып торасаҡ. Көнсығыш Башҡортостан мәҙәниәтенә таянып, бөгөн бөтә республикабыҙ мәҙәниәте донъя кимәлендә танылыуға дәғүә итә, Үҙәк һәм Көнбайыш Башҡортостандыҡын да тергеҙеп, шул кимәлгә яҡынайтыу мөһим бөгөн.

Төбәктәрҙәге милли мәҙәниәтте, традицион субкультураны тергеҙгәндә ниңә иң тәүҙә музыкаль культураны, музыка ҡоралдарын тергеҙеүгә иғтибар ителә? Мәҫәлән, республиканан ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙ, башҡортса уҡый белһәләр ҙә, иң тәүҙә китаптарға түгел, ә музыкаль аудио-, видеопродукцияға иғтибар итә? Ырымбур башҡорттары ҡоролтайы башланыр алдынан урындағы халыҡтан күптәр: «Карауанһарай» төркөмө егеттәре килмәнеме һеҙҙең менән? Кассеталар күберәк алып килегеҙ», — тип, иң тәүҙә көй-моңға һыуһауын күрһәтә. Ҡурғанда, Һарытауҙа, Һамарҙа, Силәбелә, Пермдә лә шуны уҡ күҙәттек. Тимәк, ошо ихтыяжды эффектлыраҡ файҙаланырға ла мөмкин. Милли музыка, көй-моң — иң тәүҙә үҙ төбәгенең музыкаль культураһы — кешенең тойғоларына бик нескә тәьҫир яһап, генетик кимәлдәге гармоник көйләнешкә ҡағыла, милли-мәҙәни идентитет формалашыуҙа мөһим роль уйнай. Һәр халыҡта шулай ул: шотландта ул *both* тип аталған музыка ҡоралы көйө (волынканың бер төрө, ә иң ҡыҙығы шунда — исеме *буҙ* тип әйтелә, нәҡ беҙҙәге һымаҡ), Кавказ халыҡтарында — лезгинка, украиндарҙа — кобза, эстондарҙа — торрупилль. Көнсығыш башҡорттарында — ҡурай. Ә Үҙәк һәм Көнбайыш башҡорттарында нимә? Улар әлегә үҙ моңо, көйө менән йәшәүҙән мәхрүм ҡалып килә. Үҙәк Башҡортостан халҡында элек буҙ һәм шөгөр ҡулланылған, әммә уларҙы тергеҙеүе ифрат ҡатмарлы буласаҡ. Сөнки эшләүе мәшәҡәтле, уйнауы ауыр. Мөғайын, ул элек тә һирәк осрағандыр, киләсәктә тергеҙелһә лә, «массовый» инструмент булмаясаҡ. Әммә уларҙы престиж, башҡорт халҡының музыка ҡоралдары палитраһын тулыраҡ күрһәтеү өсөн тергеҙергә кәрәк. Мәҫәлән, Эстонияла торрупилль тигән инструментта (шул уҡ буҙ) ни бары 2 (!) кеше уйнай. Көнбайыш Белоруссияла волынканы 2000 йылда ғына тергеҙҙеләр, әлеге көндә бөтә республикала ни бары 5 инструмент ҡулланыла. Шул уҡ волынкала Көнбайыш Украинаның Закарпатье, Волынь, Львов, Ивано-Франковск, Черновцы өлкәләрендә ике тиҫтә самаһы ғына кеше уйнай. Күрәһең, традицияны һаҡлау өсөн етерлектер инде. Ошонан башлана милли үҙаң, менталитет, идентитет төшөнсәләре.

Эстонияла ни бары 2 кеше торрупилль тигән инструментта уйнай тинек. Элек ул Хийумаа, Сааремаа утрауҙарында киң таралған була. Совет осоронда онотола төшә. Ошо музыка ҡоралы хөкүмәт программаһы нигеҙендә тергеҙелә. Ғөмүмән, был илдә региональ субкультураларҙы тергеҙеүгә ҙур иғтибар бирелә. Совет йылдарында Таллинн тирәһендәге төбәктең мәҙәниәте, милли костюмы, музыкаһы унификация нигеҙе булһа, хәҙер һәр төбәк үҙенең боронғо мәҙәниәтен тергеҙә. Мәҫәлән, көньяҡтағы сету халҡының кейеме, бейеүҙәре, музыкаһы беҙҙәге мари халҡыныҡына яҡын, төньяҡта — немец, төньяҡ-көнсығышта — фин, утрауҙарҙа — швед, Таллинн тирәһендә — датчан йоғонтоһо ныҡ һиҙелә. Күрше Латвия менән Эстонияла ла шул уҡ хәл — унда 5-6 төбәк субкультураһы бер юлы үҫешә. Мәҫәлән, Латгаллия менән Курляндия (латгалл һәм курша этностары) әүәл үҙҙәре айырым ил була, үҙ мәҙәниәттәрен, төбәк исемен һаҡлай. Көнбайыш Украинала ла төбәк субкультуралары ныҡ үҫешкән. Мәҫәлән, румын ҡыҙы София Ротару тыуып үҫкән төбәктәрҙә халыҡ үҙ телен, мәҙәниәтен ныҡ һаҡлай. София, мәҫәлән, үҙ телендә лә йырлай, украинса ла, рус телендә лә.

Һәр төбәктәге халыҡтың үҙ эске көйләнеше бар, уны уятырға ғына кәрәк. Милләтте берләштереү, консолидациялау кеүек сәйәси категориялар менән эш иткәндә ошо фактор ҙа иҫәпкә алынырға тейеш. Төбәктәрҙә халыҡ үҙ ҡиммәттәрен тергеҙеп, үҙ көйө, үҙ моңо менән йәшәй башлауҙа ярҙамға мохтаж. Әлегә милләттәштәребеҙҙең күбеһе сит-ят масс-культура сүп-сары менән тулған мәҙәни бушлыҡта йәшәүен дауам итә, ошо хәл милләттең берҙәмлегенә, бөтөнлөгөнә ҙур зыян килтерә. Масс-медиа өлкәһенең коммерциализация, глобализация процестары кисергән дәүерендә быға тиклемге масс-культураға алмашҡа иң юғары дәрәжәлә маргиналь, бөтөнләй икенсе сифаттарға эйә булған агрессив **паракультура** килгәнен дә иҫәпкә алырға кәрәк. Көнбайыш йәштәренең антиглобалистик сығыштарында, мәҫәлән, көсәйеп килгән паракультураға ҡаршы протест бик асыҡ төҫмөрләнә. Масс-культура, исмаһам, үҙен мәҙәниәтте массалар өсөн асығыраҡ, универсаль итеүсе, демократик йәмғиәт компоненты тип күрһәтһә, паракультура иһә туранан-тура инстинкттарға мөрәжәғәт итеп ҡоролған нәмә. Масс-культура эмоциональ сфераға иҫәп тотһа, паракультура барлыҡ эстетик шарттарҙы, сиктәрҙе, дистанцияларҙы алып ташлап, туранан-тура психикаға баҫым яһарға ынтыла. Мәҫәлән, эротик һәм порнографик әҙәбиәт, фильмдар бер ниндәй ҙә масс-культура түгел, ә ысын паракультура элементы. Музыкала ла ул элемент бар (эротик музыка хәҙер — реаль ысынбарлыҡ). Паракультура кеше аңына тәьҫир итеү өсөн бик көслө технологиялар ҡулланыуы ихтимал, һәм ул үҙенә аудиторияны иң тәүҙә «бушлыҡ йотоусылар» (Голливуд терминологияһынан) араһында таба. Башҡорт мөхитенә паракультураның төп өлөшө рус масс-медиа саралары аша килә. Татар йоғонтоһо масскультура кимәленә етеп бара. Башҡорт мөхитендә сит йоғонтоно нейтраллаштерерҙәй көс формалашып бөтмәгән. Тимәк, ошо өлкәне лә үҙләштерә башлау тураһында ла уйларға кәрәк. Проблеманан ситләшеү милләттең ҙур өлөшөн сит масс-культура һәм паракультура менән тулған бушлыҡта йәшәүгә дусар итә, йәғни берҙәм милли ұҙаң, менталитет, идентитет мөхите формалашыуын тотҡарлай һәм шуның менән милли берҙәмлеккә ҙур зыян килтерә.